*Гөлнара ҒАРИПОВА,*
*филология фәндәре кандидаты*

# БӘЛӘКӘЙ ПРОЗАЛА СИНКРЕТИЗМ КҮРЕНЕШЕ

Бөтә әҙәбиәткә хас булған кеүек, бәләкәй жанрҙарҙың үҫеше лә йәмғиәттә барған процестар менән бәйле. Әҙәбиәттең тарихи үҙгәреүсән булыуы һәм жанрҙарҙың бер туҡтауһыҙ үҫеш, үҙгәреш кисереүе уларҙы төркөмләүҙә, ниндәйҙер сиктәр билдәләргә тырышыуҙа ауырлыҡтар тыуҙыра.

Бәләкәй формаларҙың жанр сиктәрен билдәләүҙәге шартлылыҡ синкретизм хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Тимәк, улар үҙҙәрендә бер нисә жанрҙың үҙенсәлектәрен берләштерә ала. Бындай күренешкә миҫалдарҙы әҙәбиәттә байтаҡ осратырға мөмкин. Мәҫәлән, ижадтары

төрлө осорға ҡараған А. Карнай, С. Агиш хикәйәләре, Р. Ханнанов нәҫерҙәре, Ғ. Хөсәйенов парсалары, З. Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләре, С. Шәриповтың юл хикмәттәре шундай типталар. Әңгәмә, диалог кеүек әҙәби-стилистик саралар ҡулланыу, халыҡсан сатира-юморға ҡороу был әҫәрҙәрҙе көләмәстәргә яҡынайтһа (С. Агиштың «Ябай кеше», «Ялағай», З. Ураҡсиндың «Күстәнәс», «Кәнфит» һ.б.), ғибрәтле идея үткәреүе, фәһемле йомғаҡ сығарыуы менән улар мәҫәлде хәтерләтеп ҡуя. З. Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләренең, Р. Ханнановтың «Күңел нуры» (1982) китабына ингән парсаларының күбеһе ошо рәүешле яҙылған.

Р. Ханнановтың, мәҫәлән, «Бүре балаһы» парсаһының тәүге өлөшөндә һүҙ инәһен атҡас бүреккә һалып алып ҡайтылған бүре балаһы тураһында бара. Ул аусы өйөндә балалар менән бергә уйнап үҫә, һунарға йөрөй башлай. Күптәр унан «йыртҡыс», тип ситкә тайпылһа ла, асылда ул кешенең ысын дуҫы була. Бер ваҡыт ҡырағай бүреләргә тап булғас, хужаһын яҡлап, үҙен ҡорбан итә. Артабан автор шундай хикмәт сығарып ҡуя: «Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тиҙәр. Юҡ, кешеләр араһында бүре лә бүрелеген онота икән». Бында һүҙ бүреләр тураһында барһа ла, билдәле, кинәйәләп әйтелгән. Уның мәғәнәһе кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе белдереүгә ҡайтып ҡала.

Үҫеш этаптарында осрап тороусы аллегорик әҫәрҙәр мәҫәл алымдарын үҙ иткән. Улар кеше тормошондағы, йәмғиәттәге хәлваҡиғаларҙы тәбиғәт образдары аша һабаҡ алырҙай итеп һүрәтләүе менән характерлана (А. Карнайҙың «Өйрәк һәм тәлмәрйен», Р. Солтангәрәевтың «Һарығолаҡ», Р. Ханнановтың «Яҙмышмы-ҡарғышмы?» һ.б.).

С. Шәриповтың юл һәм юлаусылар хаҡындағы парсалары, тулыһынса Хужа Насретдин мәҙәктәре стиленә ҡоролоп, хәлкүренештәрҙе хикмәтле итеп һүрәтләүе менән ота.

Ғ. Хөсәйенов парсалары үҙҙәре генә лә халыҡ ижадының йәки боронғо әҙәбиәттең төрлө жанрҙарын үҙ эсенә алыуҙары менән бай һәм башҡаларҙыҡынан күпкә айырмалы. Уларҙағы хикмәт, хикәйәт, нәсихәт, көләмәс, таҡмаҡ, легенда һәм башҡа формалар, әҫәрҙәр стиле менән бергә үрелеп, композицион бер бөтөнлөк тыуҙыра, тартмалы композиция өлгөләрен барлыҡҡа килтерә.

«Хикмәте» («Тормош», 1990. 28-се б.) тигән парсала, мәҫәлән, алтын-көмөш ҡәҙере, «үҙең тапҡан ҡәҙерле, сәйнәп йотҡан тәмле» булыуы тураһында һөйләй ҙә, һүҙҙәрен алтын-көмөш табып та, уны ҡаҙып-сүпләргә йыбанып, бының өсөн осһоҙ хаҡҡа кешеләр яллап, һемәйеп ҡалған дәрүиш тураһындағы хикмәт менән нығытып ҡуя. Артабан хикмәт айышынан тағы фекер үҫеп китә, уны ҡеүәтләп һәм асыҡлап икенсе, зөбәржәтле ҡабырсаҡ эҙләп һыуға сумыусы ике балыҡсы хаҡындағы хикмәт бирелә. Уның асылы төшөндөрөлгәс, фекерҙәр йәнә ялғанып, йөкмәткә логикаһына ярашлы сираттағы хикмәт килә. Өс-дүрт ҡатын алып та һис балаһы булмаған хандың түлһеҙ-мәнһеҙ зат икәнен төшөнгән йәш бисәһе хәйләләп, ул-вариҫ табып бирә, ил-көн киләсәген һаҡлап ҡала. Шулай итеп, «Эштең асылы атында түгел, затында, исемендә түгел, есемендә. Быны белһә, йәшәү башы бары әсә белер», тигән мәғәнә хикмәтте генә түгел, бөтә парсаны йомғаҡлап бөтөрөп ҡуя.

Быңдай парсалар Көнсығыш прозаһындағы «Тутыйнамә», «Бәхтиәрнамә», «Мең дә бер кисә» кеүек тартмалы композицияға ойошҡан классик әҫәрҙәрҙең традицияларын дауам иттереүҙең матур өлгөһө лә булып тора. Әҫәрҙәрҙең айырым баш аҫтында, бүлектәргә берләшеп, үҙенә күрә циклдар төҙөү башланғысы Мәхмүд Ғәлиҙең «Нәһж-әл Фарадис»ы кеүек Урта быуаттар әҫәрҙәренән үк килә.

Ф. Ғүмәровтың «Йөҙ ҙә бер хикмәт» китабына ингән хикмәтле парсалары ла быға асыҡ миҫал була ала. Төрлө циклдарға ойошҡан был әҫәрҙәр үҙҙәренә көләмәстең халыҡсан юморын, мәҡәл һәм мәҫәлдәрҙәге фәһемлелекте, нәҫергә хас романтик стиль менән шиғрилекте лә һыйҙырған. Мәҫәлән:

Мин, тип күкрәк ҡағаһың да бит
бик яман,
Әммә шуны иҫеңдә тот, эй, уҙаман:
Кем кемлеген әйтеп бирһә бирер бары
Мәңгелектең хөкөмдары – ваҡыт-заман!

Тәрән йөкмәткеле, бай тормошсан философиялы был парсаларҙың тамырҙары Көнсығыш поэзияһынан килә. Билдәле булыуынса, Көнсығышта шиғри формалар, шул иҫәптән хикмәтле парсалар, киң популярлыҡ яулай. Бөтәһенән элек быңдай форма иҫтә ҡалдырыу өсөн иң ҡулайлыһы.

Үҙҙәре бик йыш ҡына башҡа жанрҙағы әҫәрҙәр эсенә инеп, йөкмәткегә үрелеп китә алыусы хикәйәттәр, үҙаллы жанр булып килгәндә, киреһенсә, башҡа жанр сифаттарын үҙ эсенә алалар. Улар бигерәк тә халыҡ ижады жанрҙарын — легенда,

риүәйәт, йыр, ҡобайыр, мәҡәл-әйтемдәрҙе үҙ итеүсәндәр. Мәҫәлән, Ә. Вәхитовтың «Яҡты күңел» (1981) китабына ингән хикәйәттәре, цикл рәүешендә төҙөлөп, дөйөм алғанда бер бөтөнлөктө тәшкил итә. «Мин» исеменән һөйләүсе герой һәм Әхмәҙулла бабай образдарының әҫәрҙән әҫәргә күсеп йөрөүе, уларҙы композицион ойоштороп, тартмалы композиция өлгөһө барлыҡҡа килтерә.

Әйткәндәй, әҫәрҙең беренсе заттан алып барылыуы ла Көнсығыш классик әҫәрҙәренән үк килеүсе традицияларҙың береһе. Ә Әхмәҙулла бабайҙың хикәйәт, легендалары, «Мең дә бер кисә»ләге төн һайын һөйләнгән яңы әкиәт кеүек, көн һайын яңыра, тыңлаусының ҡыҙыҡһыныуын арттыра бара.

Ә. Вәхитовтың хикәйәттәре ниндәй ҙә булһа берәй атаманың тарихын һөйләүгә ҡоролған. Уларҙа һабаҡ бирерҙәй аҡыл-фәһем дә, нәсихәт тә, киләсәк быуындарға әйтелер аманат һүҙе лә, хикмәте лә етерлек.

«Ҡәһәр бағанаһы» хикәйәтендә, мәҫәлән, һүҙ дошмандарға һатылғаны өсөн ҡәһәрләнгән һәм тораташҡа әйләнгән ҡыҙ тураһында бара. Унда ошондай юлдар бар: «Ҡыҙ баҫып торған урында, әмәлгә таянғандай, кеше кәүҙәһенә оҡшаған ҡап-ҡара таш бағана тороп ҡалған. Әйтерһең, үҙенең әсәһенә, туғандарына, тыуған ауылына, үҙен өмөтләнеп кеше иткән халҡына ауыр ваҡытта хыянат иткән ҡыҙға тәбиғәт тә асыуланған, һәм ул баҫып торған ерҙе ташландыҡ бер һыу һөрөнтөһө итеп яланғаслаған; ә ҡыҙҙы, кешеләргә мәңгелек ғибрәт булһын өсөн, ҡап-ҡара таш бағана итеп, ҡатырған, һәм ул шулай ҡап-ҡара шәүлә булып халыҡ күңелендә лә, тәбиғәттә лә мәңгегә тороп ҡалған». Был һүҙҙәр, бер яҡтан, ғибрәтле бер фәһем булып яңғыраһа, икенсенән, бындай ҡылыҡтың һис хуплауға лайыҡ түгеллегенә нәсихәт уҡыу булып ҡабул ителә.

«Аҡъегет» хикәйәтендә Әхмәҙулла бабайҙың: «Донъя, донъя, берәүҙәрең һинең ҡая һымаҡ, берәүҙәрең шул ҡаяға яғылып ҡалған лайла һымаҡ. Ямғыр тамсыһы тейһә лә, йыуылып төшөргә тора», — тигән кинәйә һүҙҙәрендә лә хикмәт тә, нәсихәт тә йәшеренгән. Кинәйәләр, аҡыллы һүҙҙәр телгә алынған ике әҫәрҙә генә түгел, һәр хикәйәттең тел төбөндә ята.

Ҡайһы бер хикәйәттәрҙә нәҫер элементтары ла осрай. Мәҫәлән, шул уҡ Ә. Вәхитовтың «Танышыу», «Урал толпары», «Юл өҫтө», «Ҡәһәр бағанаһы» һ.б. хикәйәттәрендә быға асыҡ миҫалдар һоҡланыу, уның һәр ташының, һәр ағасының үҙ тарихы барлығы, ошо тарихты киләсәк быуындарға еткереү мөһимлеге хаҡында уйланыу рәүешендә булып, әҫәрҙәргә инеш ролен башҡара.

З. Биишеваның «Мөхәббәт һәм нәфрәт» хикәйәтенең башындағы Диңгеҙбикә, уға ғашиҡ булған Ай һәм Ҡояш, Ел-Дауыл һәм Юламан ҡарттың һәр ҡайһыһының үҙенсә булған мөхәббәтен тасуирлаусы өлөшө лә үҙе бер нәҫер-хикәйәт була ала. Нәҫер жанрының барлыҡҡа килеүе лә мөхәббәткә дан йырлау менән бәйле. Тик XX быуат башы башҡорт, татар әҙәбиәттәрендә уға социаль йөкмәтке, бигерәк тә революцияны, революцион үҙгәрештәрҙе данлау мотивтары өҫтәлә.

Хикәйәттәргә хас уйҙырмалылыҡ, шартлылыҡ, ысынбарлыҡ менән хыялдың ҡушылыуы уларҙы бер аҙ әкиәттәргә лә яҡынайта.

З. Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәренең идея-йөкмәткеһен асыу Хасбулат олатайҙың хикәйәте аша бирелә. Хикәйәт ябай ғына түгел, хикмәтле. Ә хикмәт бар ерҙә фәһеме лә, нәсихәте лә булмай ҡалмай. Хикәйәттә Һөнәрсе һәм Өйрәнсек кеүек шартлы, кинәйәле образдар хәрәкәт итә. Әгәр уларҙың тәүгеһе яҡшылыҡ, матурлыҡ, рухи гүзәллек кеүек сифаттарҙы символлаштырһа, икенсеһе, киреһенсә, яманлыҡ, ялағайлыҡ, түбәнлек төшөнсәләрен дөйөмләштереүсе образ. Ошо ике образ бирелеше аша яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың мәңгелек көрәше, яҡшының еңеп сығыуы әкиәттәрҙәге һымағыраҡ һүрәтләнә. Хикәйәткә халыҡ ижадынан килеп ингән күркәм мәҡәл-әйтемдәр ҙә әҫәр теле менән уңышлы үрелеп китә.

Хикәйәт жанры, үткән менән бөгөнгөнө һәм киләсәкте бер бөтөн итеп, үткәндәрһеҙ бөгөнгө, үткән менән бөгөнгөһөҙ киләсәк юҡ тип күрһәтергә тырыша.

Ваҡыт-ара төшөнсәләрен юйып, үткән-бөгөнгө һәм киләсәкте берләштерергә ынтылыу һуңғы йылдар хикәйә (Ф. Аҡбулатованың «Остаз менән Нәркәс», «Таш ҡәлғә») һәм новеллаларында (Ф. Ғәлимовтың «Мәжлес», З. Зиннәтуллиндың «Диуар») ла күренә башланы. Бындай әҫәрҙәрҙә тормош дөрөҫлөгө серлелек, мөғжизәлелек менән аралашып килә, хыял менән ысынбарлыҡ ҡушыла.

Урта быуаттың әҙәп әҙәбиәтенән килгән, айырыуса уның нәсихәт жанрына хас

булған өгөт-нәсихәтлелек, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренә арналғанлыҡ мотивтары ла бөгөнгө әҙәбиәттә, бигерәк тә бәләкәй проза, үҙ һыҙаттарын юғалтмай.

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был һыҙаттар жанрҙар эволюцияһының бөтә осорҙарында тиерлек әҫәрҙәрҙә үҙәк проблемаларҙың береһе булып ойоша. Бигерәк тә бөгөн – иман юғалған, рухи зәғифлек кисергән бер заманда – бындай проблемалы әҫәрҙәр бик актуаль яңғырай һәм төрлө жанрҙарҙа күҙәтелә. Мәҫәлән, Ә. Чаныш парсалары, Р. Ханнанов нәҫерҙәре, З. Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләре, Г. Ғиззәтуллина, Т. Ғарипова, Ф. Аҡбулатова һәм башҡаларҙың хикәйәләре был йәһәттән уңышлы эшләнгән. Әгәр нәҫер, хикәйәт, парсаларҙа дидактика мәғлүм урын алһа, хикәйә, новеллаларҙа әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре киңерәк яҡтыртылып, нәсихәтен табыу уҡыусы ихтыярына ҡалдырыла.

Художестволы форма булыу йәһәтенән М. Кәримдең «Ғүмер миҙгелдәре» (1992) китабына ингән әҫәрҙәре айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Тәү ҡарашҡа улар новеллистик парсаларҙы хәтерләтә. Әҫәрҙәр авторҙың үткән-кискәндәрен хәтерләү булып автобиографизм элементтары һымаҡ ҡабул ителһә лә, уларҙа ниндәйҙер хәлваҡиғаны, күренеште һүрәтләп биреү үҙәктә тормай, ә бәлки фәлсәфәүи уйланыуҙар, иҫтәлектәр нигеҙендә ятҡан философия мөһим роль уйнай.

Иҫтәлектәр парсаларға туранан-тура ғына күсеп ҡуймай, яҙыусы йөрәге һәм аҡылы аша үткәрелеп, фәһемле, тапҡыр һәм кинәйәле итеп ижтимағи фекер кимәленә күтәрелә. Парсалар йылы юмор менән һуғарылып, уларҙағы фекерҙәр ҡатлы-ҡатлы итеп бирелеп, көтөлмәгән боролоштар яһап, көтөлмәгәнсә тамамланып ҡуя. М. Кәримдең «Ғүмер миҙгелдәре» китабындағы әҫәрҙәр башлыса халыҡсан аҡылға, халыҡ педагогикаһына нигеҙләнгән.

Лиро-эпик төргә ҡараған, беҙ «новеллистик парсалар» тип атаған был әҫәрҙәр бер үк ваҡытта жанр сиктәренең хәрәкәтсән булыуын да раҫлай. Беҙ уларҙа көндәлек, юл яҙмалары, иҫтәлек, очерк, портрет, пейзаж сифаттары ла күрәбеҙ. Ләкин уларҙың береһен дә жанрҙы билдәләүсе төп критерий итеп алып булмай. Был әҫәрҙәр бер нисә жанр компонентынан берләшкән парсалар булып ҡала. Йөкмәтке эсенә хикмәте лә, нәсихәте лә, хикәйәте лә инеп китә. Ошо уҡ сифаттар И. Абдуллин нәҫерҙәренә, Ғ. Хөсәйенов, Ә. Чаныш парсаларына, З. Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләренә, С. Шәриповтың юл хикмәттәренә лә хас.

Үрҙә аталған авторҙарҙың парсаларына, уймаҡ хикәйәләренә оҡшаш бындай әҫәрҙәр башҡа әҙәбиәттәрҙә лә осрап тора. Мәҫәлән, Ф. Абрамовтың «Трава-мурава», «Были-небыли», В. Солоухиндың «Камешки на ладони», И. Ғазиҙың «Әдәби парчалар» циклдары шундай формала яҙылған. Әҙәби тәнҡит уларҙың жанрын билдәләүҙә хикәйә-эссе («рассказ-эссе»), мәҫәлнәсихәт («притча-наставление»), хикәйәуйланыу («рассказ-раздумье»), хикәйәфекер («рассказ-размышление»), лирикфилософик миниатюра кеүек төрлө терминдар ҡуллана.

Бындай әҫәрҙәрҙең жанр үҙенсәлеге шунда, улар үҙҙәрендә бер юлы бер нисә жанрҙың сифаттарын берләштереп, художестволы бер бөтөнлөк төҙөй. Уларҙың традицион фабулаһы ла юҡ кеүек. Сюжетты фекерҙәрҙең эске ағышы барлыҡҡа килтерһә, уға ярашлы композиция ла үҙенсәлекле төҫ ала. Әҫәрҙәргә ассоциативлыҡ, параллелизм, контраст, символизм алымдары килеп инә.

Көнелдең төрлө мәлдәре төрлө жанрҙарҙың алға сығыуына йоғонто яһай. Өлгөргән идеяны, фекерҙе тышҡа сығарыу, халыҡҡа еткереү өсөн, бер ҡараһаң, публицистик жанр кәрәк, икенсе бер мәлдә, мәҫәлән, хислерәк, һағышлыраҡ уй-фекерҙе әйтеп биреүгә лирик жанрҙар ҡулайыраҡ. Ҡайһы ваҡыт философик уйланыуҙар өҫтөнлөк алып китһә, икенсе ваҡыт образлы дөйөмләштереү, йә булмаһа, ҡыҫҡа ғына итеп хикмәтләп, нәсихәтләп, кинәйәләп әйтеү талабы килеп тыуа. Шулай итеп, һәр жанрҙың (бер аҙ шартлы булһа ла) үҙенә күрә бер функцияһы барлыҡҡа килә. Ләкин, бөгөнгө жанрҙарҙың тәғәйенләнешен айырып ҡына күрһәтеү ҡыйын. Жанр сиктәре шартлы булған кеүек, ошо тәғәйенләнеш йәһәтенән дә шартлылыҡ һаҡлана.

Хәҙерге жанрҙар күпме генә синтетик, синкретик булмаһын, шул ваҡытта уларҙың жанрҙы жанр итеүсе, үҙҙәренә генә хас шәхси һыҙаттары бар. Заманалар үтә-үҙгәрә торған һайын был жанрҙар ҙа үҫә, үҙгәрә, камиллаша, художестволылыҡтың яңы саралары менән байыға тора. Улар бер-береһе менән үҙ-ара тәьҫир итешеп кенә ҡалмай, ҙур проза, ә киңерәк алғанда, поэзия һәм драма менән дә тығыҙ бәйләнеп, башҡа жанрҙарҙы формалаштырыуҙа актив ҡатнашалар.